Балаларға бағышланған Изге Яҙмалар

Тәҡдим итә

# Кеше ҡайғыһының башы



Автор: Edward Hughes

Кәүҙәләндерелгән: Byron Unger; Lazarus
Alastair Paterson

Яраҡлаштырылған: M. Maillot; Tammy S.

Тәржемә: www.christian-translation.com

Сығарылған: Bible for Children
www.M1914.org

©2021 Bible for Children, Inc.
Лицензия: Һеҙҙең күсермәгеҙ һатыуға тәғәйенләнмәгән булһа,
был хикәйәне күсерергә йәки баҫтырырға хоҡуҡығыҙ бар.

# АЛЛА БАР НИМӘНЕ ЛӘ ЯРАЛТТЫ!

Алла беренсе кешене, Әҙәмде, яралтҡанда, ул ҡатыны Һауа менән Эдем баҡсаһында йәшәй ине. Улар Аллаға табынып, уның барлығынан шатланып, бәхетле йәшәйҙәр ине. Тик бер көн ...





“Ә Алла һиңә һәр ағастан ашарға ярай тинеме” - тип һораны Һауанан йылан. “Бер ағастан башҡа, ҡалғандарының бөтәһенән дә ашарға ярай” - тип яуап бирҙе ул. “Һеҙ улмәйәсәкһегеҙ” - тип йылмайҙы йылан. “Һеҙ Алла кеүек буласаҡһығыҙ”. Һауаның шул ағастың емешен татып ҡараһы килде. Ул йыланды тыңлап, емеште ауыҙ итте.

Алланың әйтеүен тыңламай, Һауа Әҙәмгә лә емеште ауыҙ иттерҙе. Шул саҡта Әҙәм былай тип әйтергә тейеш ине: “Юҡ, мин Алла Һүҙен боҙмайым”.







Әҙәм менән Һауа ғонаһ ҡылғас ҡына, үҙҙәренең яланғас икәнлектәрен аңланылар. Инжир япраҡтары менән яланғас ерҙәрен ҡаплап, Алла барлығынан ҡурҡып, ҡыуаҡтар араһына ҡастылар.

Киске һалҡында баҡсаға Алла килде.  Әҙәм менән Һауаның нимә эшләгәнен ул белә ине.  Әҙәм Һауаны ғәйепләне.  Һауа – йыланды.  Алла әйтте: “Йыланды ҡәһәр һуғасаҡ.  Ә ҡатын-ҡыҙ ғазап сигеп бала табасаҡ”.  Ә Әҙәмгә ул әйтте: “Әҙәм, һинең ғонаһың арҡаһында ерҙе бүреләр һәм сәнескеләр ҡәһәрләне.  Тиргә батып һин үҙ икмәгеңде ашарһың”.





Алла Әҙәм менән Һауаны иҫкиткес баҡсанан ҡыуып сығарҙы. Ғонаһ ҡылғандары өсөн, уларға ғүмер биргән Алланан айырылдылар.



Уларҙы эскә индермәҫ өсөн, Алла ут-ҡылыс яһаны. Алла Әҙәм менән Һауаға күн кейем текте. Ҡайҙан Алла тире алған?

Ваҡыт үтеү менән Әҙәм һәм Һауаның балалары тыуҙы. Уларҙың беренсе улдары Ҡаин – баҡсасы булды. Икенсе улдары Авель – көтөүсе. Иғәнә өсөн бер көндө Ҡаин Раббыға йәшелсә килтерҙе. Авель иғәнә өсөн Аллаға иң яҡшы бәрәсен алып килде. Авелдың бүләгенә Алла ҡәнәғәт булды.



Ҡаиндың бүләге Аллаға оҡшаманы. Ҡаин бик асыуланды.  Алла уға әйтте: “Әгәр яҡшылыҡтар эшләһәң, йөҙөңдө таҙартырһың”.



Ҡаиндың асыуы утмәне.  Купмелер ваҡыт үткәс, ул ҡырҙа Авелға ташланды һәм уны үлтерҙе.



Алла Ҡаиндан һораны: “Авел туғаның ҡайҙа?” “Белмәйем, - тип алдашты Ҡаин, - мин уға һаҡсымы ни?”  Алла Ҡаинды язаланы.  Уны баҡсасы булыу мөмкинлегенән мәхрүм итте.



Ҡаин Хоҙай ҡарауылыннан сыҡты.  Ул Әҙәм менән Һауа ҡыҙына өйләнде.  Улар бергәләп балалар үҫтерҙеләр.  Оҙаҡламай Ҡаиндың  ейән-ейәнсәрҙәре ул нигеҙ һалған ҡалала урынлаштылар.



Шул уҡ ваҡытта Әҙәм менән Һауаның ғаиләһе тиҙ үҫте.  Кешеләр, был көндәргә ҡарағанда, ул саҡта күпкә оҙағыраҡ йәшәй ине.



Унының улы Сиф тыуғас, Һауа: "Алла Сифты Авелды алыштырһын өсөн бирҙе", тине. Сиф 912 йыл йәшәгән һәм күп балалы дин кешеһе булған.



Бер быуын киләһе быуынды алыштырып килгәндә, донъялағы кешеләр насарлана башланылар. Ахырҙа, Алла кешелекте юҡҡа сығарырға булды һәм бөтә хайуандарҙы һәм ҡоштарҙы. Алла кешене барлыҡҡа килтергәненә



Был кеше Нух ине.  Сиф тоҡомоннан, Нух гәҙел һәм ғәйепһеҙ ине.  Ул Алла менән йөрөнө.  Ул шулай уҡ үҙенең өс улын Аллаға буйһонорға өйрәтте.  Хәҙер Алла Нухты махсус ҡулланырға ниәтләне!



Кеше ҡайғыһының башы

Алла Һүҙеннән, Изге Яҙманан хикәйә

урынлашҡан

3-6 йәшәйеш

“Һинең һүҙҙәреңдең асылыуы мәғърифәтле.”
Мәдхия 119:130

# Тамам

2

60

Был Изге Яҙма хикәйәһе һеҙҙе бар иткән һәм Уны
танып белеүен теләгән иҫкиткес Алла тураһында һөйләй.

Беҙҙең насар эштәр эшләгәнде Алла белә, һәм был эштәрҙе ул
ғонаһ тип атай. Ғонаһ өсөн яҙа – үлем, ләкин Алла һеҙҙе шул тиклем
ярата, хатта үҙенең берҙән-бер улы Ғайсаны һеҙҙең өсөн тәрелә үлергә
һәм ғонаһтарығыҙ өсөн яҙаланырға ебәрҙе. Унан һуң Ғайса терелтелде
һәм өйөнә күккә ҡайтты. Әгәр ҙә һеҙ Ғайсаға ышанһағыҙ һәм унан
ғонаһтарығыҙҙы кисереүен һораһағыҙ, ул уны эшләйәсәк. Ул һеҙҙең
тормошҡа инер, хәҙер һеҙҙең күңелдә йәшәр, һәм
һеҙ уның менән мәңге йәшәрһегеҙ.

Әгәр ҙә һин бының дөрөҫлөгөнә ышанһаң, Аллаға былай тип әйт:
Хөрмәтле Ғайса, мин ышанам, Һеҙ Алла һәм минең ғонаһтарым өсөн
үлер өсөн кеше булдығыҙ, терелтелдегеҙ һәм бына хәҙер һеҙ яңынан
тере. Мин хәҙер яңы тормош башлар өсөн, зинһар минең тормошҡа
инегеҙ һәм ғонаһтарымды кисерегеҙ, һәм бер көн барып, мәңге
һеҙҙең менән булырмын. Һиңә буйһонорға һәм Һинең
Балаң кеүек йәшәргә булыш миңә. Амин.

Изге Яҙманы уҡы һәм Алла менән көн һайын һөйләш. Иван 3:16